*Лариса* ***АБДУЛЛИНА***

# «Йырҙар менән беҙ имләйбеҙ кеүек Аҡылынан шашҡан заманды...»

## Илем

Ҡосағыма алып иркәләрлек,
Яратып та туймаҫ баламдай,
Юл сатында хәйер һорашыусы
Дәрүиш һынлы ярлы бабамдай,

Әллә кемдәр килеп киткәндә лә,
Тупраҡ һынлы, һатмаҫ анамдай,
Төшөндә лә яуға сыҡҡан шанлы,
Мең ҡораллы ғәзиз ағамдай —

Хәсрәттәре ташйылғалар булып,
Шауҙырлап та аҡҡан ил — ошо.
Нисек кенә һине имләргә тип
Ҡиблаларға ҡарап торошом.

«Балам!» — тиеп үҙең өндәшәһең,
Мегаполис миңә һүҙ ҡуша.
Ҡалыптарға һыймаҫ был ҡәлебем
Һыҙланыуҙан ҡала шул бушап!..

Йәнбикәнән Урал тыуған кеүек,
Шүлгән дә бит — уның балаһы.
Затлы тоҡомдарҙы зарға һалған
Бар ҡаяла Һатлыҡ араһы.

Унан һин дә, мин дә үттек,
Шашып көлгәндәрем хәтерҙә.
Һыны ҡатҡан һынташтарҙың һаман
Эсе боша микән хәҙер ҙә?..

Юҡ, тауҙарға ҡарап зарланмайым,
Тауҙар бөркөт яһай шиғырҙан.
Доға булырҙайын яҙа белһәң,
Ишектәрен аса шығырҙап.

Илем, ниндәй сүрәттәрең булды,
Лотфуллиндың етмәҫ киндере.
Ҡүмелһәң дә, тамам ерләнмәнең, —
Балам төҫөндә лә һин тере!
Анам төҫөндә лә һин тере!
Ағам төҫөндә лә һин тере! —
Шулар бит ул бабам ғүмере!..

Арыҫланға атланғанды белгәс,
Белгәс шонҡарҙарың барлығын,
Ҡүтәрҙем мин хатта бүреләрҙәй,
Бер-береһен сәйнәү ярлығын...

Батырҙарҙан батыр тыумаһа ла,
Һаҡлай ул ҡан намыҫ кимәлен.
Әпкәләйҙәр, Шариковтар бөгөн
Тапҡан зауыҡ тылҡыр әмәлен...

О, был хурлыҡ!
Түбәнселек!
Ғәрлегемдән ятып үлмәнем!
Һарҡынтылар ерҙең һүлен эсер,
Меҫкенләнә күрмә, Ил-йәнем!

## Күңел инженерҙары

*Башҡорттар бейей, башҡорттар йырлай, тиҙәр...*

Беҙ бейейбеҙ,
Моңло йыр һуҙабыҙ,
Шиғырҙарҙан һәйкәл ҡоябыҙ.
Әллә шуға ҡитғаларҙы нурлай
Һандуғаслы Урал — ояbыҙ.

Бер ҡараһаң, хатта ғәжәп кеүек
Ямағанда берәү ыштанды,
Унын бурысы юҡ,
Кредиты юҡ —
Ул йөкһөҙ тип әйттем ышанып.

Ниңә әле алыҫтағы астың
Түрәләре асыу ҡабарта?
Бар мохтаждар Баймаҡ, Дәүләкәндә —
Улар ҙа бит кәнфит ярата.

Ил сигенә барып баҫып ҡара —
Миллионлаған ҡараш төбәлгән.
Улар көтә биктәр сайҡалыуын —
Буштың аты күптән егелгән.

Донъя картинаһы үҙгәргәндә,
Юғалтҡанда юлын караптар,
Әлдә генә беҙҙең йырҙар бар ҙа,
Әлдә генә беҙҙең Урал бар.

Йыһандарҙы гиҙеп йөрөһәң дә,
Тартыу көсө ашҡас саманан,
Рухы менән бәндә бында ҡайтып,
Яраларын ерҙә ямаған.

Йырҙар менән беҙ имләйбеҙ кеүек
Аҡылынан шашҡан заманды.

Инженеры кеүек күңелдәрҙең,
Моңланабыҙ таңдан һаман да.

Теткеләнгән ҡитға,
Йыртыҡ Ватан,
Үткел елдәр йолҡа әләмде.
Аһ, илгенәм минең,
Ғәзиз Урал —
Һинең хәлең — минең хәлемдәй.

Донецкиҙа,
Ростов Донда*, ана,
Ҡүмәртәләп йәндәр ҡыйыла.
Фанилыҡта хаҡтар осһоҙораҡ,
Берәм-берәм үлеү тыйыла?..

Ут сыҡһа ла,
Һыу баҫһа ла хәҙер
Йөҙәрләгән бәндә хушлаша.
— Тыныслыҡ тип илде һаҡлағайныҡ! —
Өндәшкәндәй олатай ут аша.

Ут ашай ҙа заман, хут, йот ашай,
Хәсрәт ташый быуат утлыҡтан,
Һәм төбәлеп ҡарай Уралтауға:
Юҡмы шунда берәү йыр отҡан?!

Әллә түлен, әллә кейем ямай —
Таңдан ғына һыҙылып моң аҡты!
Йырлаһындар,
Йәнде имләһендәр,
Сәңгелдәктән дәүер бәпләһендәр,
Заман кәйефтәрен көйләһендәр,
тиеп, Аллам,
Яралттыңмы ошо халыҡты?!.

* Дондағы Ростов

## Ҡитап хаҡы

«Рәсүл Ғамзатов»ты һатып алдым —
Өс тин ине хаҡы китаптың.
Ошо баһа әллә аһым булды —
Әллә ниндәй уйҙар уйлатты.

Ә ҡасандыр уның әҫәрҙәрен
Сират тороп һатып алдылар,
Ҙур танышлыҡ менән Үҙәктәрҙән
Посылкалар итеп һалдылар...

Тотош Ватан уны яттан белде,
«Аҡ торналар» осто ғаләмгә!
Тауҙай илһам бүләк итте Шағир
Совет илендәге әҙәмгә!

Тауҙай маҡсаттарҙы яулаған ил,
Йөрәктәргә тулғас ер моңо.
Ҡаф тауҙағы ауылынан Шағир
Ҡитғаларға шиғыр уҡыны.

Йырлы ине илдең һәр бер көнө,
Бала сағым менең — йырлы таң.
Аҡ торналар һанап үҫкәнгәме,
Мин әле лә шиғыр яратам.

Тик яналар бөгөн ҡулъяҙмалар,
Ҡитап йорто — инде хараба.
Ҡешеләрҙең күҙе йырға түгел,
Ҡара ҡумталарға ҡараған.

Хәүефлерәк минең һәр бер көнөм,
Һуңғы түгел микән был төнөм?
Упҡын ситендәге бер балалай,
Рухы һынған илдән өркөнөм.

Шағир ошоларҙы күрмәһә лә,
Рухы тоялыр ул был хәлде.
Йырһыҙ, эшһеҙ итеп ҡәүемдәрҙе
Даллес п(ы)ландары үтәлде.

Упҡын ситтәренә килеп еткәс,
«Титаник»тай бата Ватаным.
Әллә ғәйеп тойоп, ил батҡанға,
Шағир шиғырҙарын ятланым,
Ҡөрьән сүрәләрен ятланым.
Һуңғы түгел микән был таңым?!

## Тауҙар юлы...

Һин тауҙарға тағы йыйынаһың,
Һыйынырға йәнә таштарға.
Уйыңдағы хәсрәт ҡаяларын
Упҡындарға микән ташларға?

Мәсеттәргә килгән гонаһлылай,
Унда киләһеңме тәүбәгә?
Ниҙәр эҙләүеңде тау юлында
Белмәйһеңдер үҙең әлегә...

Тауҙар йырын тыңлап сафланыуңмы,
Саф ҡалырға теләү тауҙарҙа?
Мөмкин микән тау шишмәһе булыу
Илдә мәкер тигән яу барҙа!

Тауҙар сире һиңә йоҡҡан әллә?
Әллә тарта һине һил тынлыҡ?
Һинең өсөн тау урманы тигән
Ҡемдер өсөн бөгөн — утынлыҡ.

Бөркөт булдың микән үткәнеңдә,
Булдың микән әллә һунарсы?
Бәндә үрләй алмаҫ ҡаялар бар,
Улар бейеклеге мең аршын.

Тәбиғәткә әллә ҡайтыуыңмы,
Үҙеңдеме эҙләү асылда?
Әҙәмдәрҙең бөтмәҫ һағышы бар,
Улар тауҙарҙа ла баҫылмаҫ...

Ҡуй, тауҙарҙы улай аптыратма:
Улар ниҙәр генә күрмәгән?
Ғишыҡ уттарыңды унда түгел,
Ҡыҙҙар ҡосағында баҫ, мәгәр.

## Минең көрәш

Егерме берҙең быуат сигендә, күр,
Халыҡ йырын һалып йөрәккә,
Терһәкләшеп тороп беҙҙекеләр
Йыһан үрҙәренә үрмәкләй.

Башҡалармы —
Мираҫ булә, мал талай,
Берәү Ерҙе һатып алмаҡсы.
Айға ынтылыусы ҡулдар ҙа бар,
Ай күҙ ҡыҫа күктән — алдаҡсы!..

Һәр береһе тәғлимәтен тарта,
Тиҫбе тартҡан кеүек сиркәүҙә.
Ҡыбырлаша,
Ялтыраша хаос,
Ҡиәмәтме ҡупҡан иләүҙә?!.

Катахезисты ла уҡыным мин,
Бөртөгө лә йәндә шытманы:
Урал менән барын үлсәгәндә,
Был бит мейе утау һут манып.

Көрәшмәйем.
Ул һуғыштар беҙҙә
Ашып киткән инде саманан.

Үрнәк алдым бары Тирләндәге
Урман йырып торған ҡаянан.
Көрәш миңә ҡыҙыҡ йылдар менән,
Һырҙар менән хәҙер серләшәм!
Үҙем менән үҙем көрәшкәндә
Ҡабыҙып та ҡуям ҡыр(ы)ҡ шәм.

Сал далала, ана, — башҡорт төҫө,
Милләт төҫө һеңгән тауҙарға.
Сабырлыҡты һәм дә ғәййәрлекте
Мин уларҙан сыҡтым ауларға.

Баррелдәрҙә иҫәпләнгән саҡта
Ерҙә хужаларҙың ҡиммәте,
Урал вариҫтары — романтик зат,
Ҡуймаһын тим йәнең имгәтеп
Замананың дауыл, шаршылары.
Үҙең менән көрәш асылда.
Ҡурай сәскәһеләй бер биҙәк беҙ —
Йәм-йәшел Ер булған баҫыуҙа.

Сәстәремә ҡуна дәүер шауы,
Биттәремә иҫә сал елдәр.
Егерме берҙә йыр арбаһын тартҡан
Йырға һыйыныусы беҙ — кемдәр?

## Торатау — 2

Телгә килер борон замандарҙа
Ергә күмгән изге яҙмалар.
Кешеләрҙәй, әллә дәүерҙәр ҙә
Шашып, аҡылынан яҙалар.

Телгә килер янған китаптар ҙа,
Уттан ҡала икән һүҙ көсө.
Улар мәлен көтә ил өҫтөндә,
Гүйә, айҡай Урал бөркөтө.

Гонаһһыҙҙар, әйҙә, таш һелтәгеҙ
Ҡартлас тауҙың ҡарап үренә.
Өнһөҙ хозурлығы был ерҙәрҙең
Зиһен шаңҡығанда күренә.

Телһеҙ әҙәм телгә килгән кеүек,
Күрә башлағанда һуҡырҙар,
Күсәрҙәрҙең координаты күскәс,
Ниҙәр менән тулыр буш ырҙын?

Ер менән Күк иҫәптәре — башҡа,
Ҡыҙыл нөктәләргә баҫылды.
Тауҙай ғорурбыҙмы?
Туҙанбыҙмы?
Һалырғамы шунда башыңды?

Телгә килгән саҡта боронғолар,
Телдән яҙмаҫ тимә бөгөнгө.
Дарья икән, имеш, тотош был Ер,
Тауҙа айсбергтың башы күренде...